ISBN 978-5-91608-181-7 С. 285-288

https://doi.org/10.31833/conf_ihll2019.055

УДК 372. 8

**Л. Х. Сәмситова**

*Башкирский государственный педагогический университет им. М. Акмуллы*
*ул. Октябрьской революции, 3-а, Уфа, 450008, Россия*
*E-mail: luiza_sam@mail.ru*

# БАШҠОРТ ТЕЛЕН УҠЫТЫУҘЫҢ ЛИНГВОКУЛЬТУРОЛОГИК АСПЕКТЫ

Реализация лингвокультурологического подхода в обучении является одним из эффективных средств приобщения обучающегося к национальной культуре через изучение родного языка, а также воспитание осознанного отношения и интереса к языку и формирование лингвокультурологической компетенции. Обосновывается мысль о том, что лингвокультурологический аспект в преподавании языка способствует развитию интеллектуальных и творческих способностей обучающихся, расширению кругозора, обогащению словарного запаса и т.д.

*Ключевые слова:* лингвокультурология, язык, культура, башкирский язык, языковая личность.

XXI быуат лингвистикаһы һүҙҙе тел берәмеге итеп кенә түгел, ә мәҙәниәт берәмеге, концепт булараҡ ҡарай, шуға күрә лә башҡорт телен уҡытыуҙың яңы концепцияһы нигеҙендә тел һәм мәҙәниәт бәйләнеше урын алырға тейеш. Мәҙәниәт – күп яҡлы, үҙенсәлекле күренеш. Тел мәҙәниәттә булған әйберҙәрҙе атап, сағылдырып ҡына ҡалмай, ә ошо мәҙәниәт эсендә үҫә. Тел мәҙәниәттең барлыҡҡа килеү ҡоралы, үҫеүе, һаҡланыуы һәм уның төҙөлөшө булып та тора. Ошо идея нигеҙендә яңы фән – лингвокультурология барлыҡҡа килә. Лингвокультурология, тел һәм мәҙәниәттең бәйләнешен өйрәнеп, тел шәхесе һәм донъя тел картинаһының төҙөлөшөн сағылдыра.

Туған тел аша милли мәҙәниәтте өйрәнеү уҡыусыларҙың аңы формалашыуында ғына түгел, ә уларҙың мәҙәниәткә берегеүендә мөһим роль уйнай. Мәҙәниәт аша телгә өйрәтеү бөгөн «Башҡорт теле» предметының бер өлөшө булып тора. Уның маҡсаты – башҡорт телен аралашыу ҡоралы булараҡ донъяны танып белергә, үҙенде был тормошта табырға өйрәтеү. Туған тел – тәрбиәләү сараһы ла, сөнки ул халҡыбыҙҙың рухи ҡиммәттәрен баһаларға, икенсе милләт вәкилдәренә ҡарата толерантлы булырға өйрәтә, әхлаҡи-патриотик тойғоларҙы булдырыуҙа мөһим роль уйнай.

Телде мәҙәниәт, тарих, халыҡ психологияһынан айырып өйрәнеү мөмкин түгел. Күп милләтле Башҡортостан Республикаһы өсөн актуаль булған күп мәҙәниәтле уҡытыуҙы тормошҡа ашырыу әүҙемләшә. Телдәрҙе уҡытыу, шул иҫәптән дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыу, яңы йүнәлештәге хеҙмәттәр талап итә.

Һуңғы ваҡытта тел ғилемендә этнолингвистика һәм лингвокультурологияға иғтибар артты. Тел һәм мәҙәниәт проблемаларына арналған хеҙмәттәрҙең күп булыуы был

йүнәлештең актуаллеге тураһында һөйләй. Лингвокультурология буйынса ғилми хеҙмәттәр күп, ләкин лингвокультурология проблемалары буйынса уҡытыу баҫмалары юҡ. Хәҙерге көн проблемаларына ярашлы башҡорт телен башҡорт мәктәптәрендә генә түгел, ә барлыҡ дөйөм белем биреү ойошмаларында ла лингвокультурологик йүнәлештә өйрәнеү мөһим.

Телебеҙҙә халҡыбыҙҙың мәҙәниәте, тарихы, йолалары һәм менталитеты сағылыш тапҡан. Лингвокультурологик йүнәлештәге уҡытыуҙың йөкмәткеһен һайлағанда йолаларҙа, көндәлек тормошта, мәҙәниәттә, әҙәбиәттә сағылыш тапҡан туған телдең милли үҙенсәлеген иҫәпкә алырға кәрәк. Туған телде өйрәнеп, уҡыусылар, студенттар унын лексик һәм грамматик байлығын, образлылығын, тасуирлылығын, матурлығын үҙләштерә.

Башҡорт телен уҡытыуҙың лингвокультурологик аспекты үҙ эсенә милли-мәҙәни аспекттағы лексика (фонлы, коннотатив, эквивалентһыҙ), телмәр этикеты, реалиялар, фольклор өлгөләрен, тел шәхесе, концепт, донъя тел картинаһы, мәҡәл һәм әйтемдәрҙе, фразеологик берәмектәрҙе һ.б. алырға тейеш.

Лингвокультурологияның үҙәгендә тел һәм мәҙәниәтте өйрәнеүсе, үҙенең фонлы белеме, әҙәп-әхлаҡ нормалары менән билдәле мәҙәниәттең вәкиле булған кеше тора.

«Башҡортостан Республикаһы белем биреү учреждениеларында башҡорт теленә һәм туған телдәргә өйрәтеүҙең лингвокультурологик концепцияһы»н байытыу һәм тулыландырыу, уҡытыу процесына (конкретыраҡ алғанда, дәрес структураһына) индереү тик яңы быуын өсөн төҙөлгән, тел һәм мәҙәниәттең рухи ҡиммәттәре менән һуғарылған программа, дәреслек, уҡыу әсбаптары булғанда ғына тормошҡа ашасаҡ, шуға күрә был йүнәлештәге эште һүҙлек төҙөүҙән башланыҡ.

«Башҡорт тел картинаһында мәҙәниәт концепттары» һүҙлеге «Башҡортостан Республикаһы белем биреү учреждениеларында башҡорт теленә һәм туған телдәргә өйрәтеүҙең лингвокультурологик концепцияһы»н тормошҡа ашырырға ярҙам итә һәм Л.Х. Сәмситова тарафынан төҙөлгән һәм яҙылған «Башҡорт мәҙәниәте реалиялары» башҡорт теленең эквивалентһыҙ лексикаһы һүҙлегенең дауамы булып тора.

«Башҡорт тел картинаһында мәҙәниәт концепттары» (Өфө: Китап, 2010) һүҙлеге лингвокультурологик һүҙлек һанала. Һүҙлектә башҡорт халҡының мәҙәниәте, әҙәп-әхлаҡ нормалары, көнкүреше, аңы, донъяға ҡарашы лексикографик планда тасуирлана. Лингвокультурологик йүнәлеш үҫеш алғанда бындай һүҙлек төҙөү бик актуаль, сөнки был һүҙлек нигеҙендә тел һәм мәҙәниәт берлеге идеяһы ята. Бында һүҙ тел берәмеге генә түгел, ә мәҙәниәт концепты булараҡ ҡарала; улар аша тел шәхесе менталитеты формалаша. Бөгөнгө яңы быуындың әҙәп-әхлаҡ нормаһы ҡаҡшаған ваҡытта был бик мөһим.

«Башҡорт тел картинаһында мәҙәниәт концепттары» һүҙлегенә халҡыбыҙ тарихы, менталитеты, донъяға ҡарашы, аңын сағылдырған 70 мәҙәниәт концепты инде.

Концепттарҙы һайлап алыу сығанағы булып фәнни хеҙмәттәр, һүҙлектәр, халыҡ ижады өлгөләре, башҡорт шағирҙары һәм яҙыусыларының әҫәрҙәре торҙо.

Был һүҙлектең дауамы булып, авторҙар коллективы тарафынан яҙылған «Башҡорт фольклоры концептосфераһы» лингвокультурологик һүҙлеге донъя күрҙе (Өфө: Китап, 2013). Был – халыҡ ижады өлгөләре нигеҙендә башҡорт тел картинаһындағы мәҙәниәт концепттарын системаға һалыу буйынса тәүге эш. Һүҙлектә бөтәһе 168 концепт тупланған.

«Башҡорт тел картинаһында мәҙәниәт концепттары» һүҙлегенең күп өлөшөн проза һәм поэзия текстарынан өҙөктәр тәшкил итһә, был һүҙлек фольклор өлгөләре нигеҙендә төҙөлдө. Һөҙөмтәлә, башҡорт тел картинаһындағы мәҙәниәт концепттары төрлө яҡлап тикшерелеп, комплекслы хеҙмәт барлыҡҡа килде. Һүҙлектә башҡорт халҡының мәҙәниәте, әҙәп-әхлаҡ нормалары, көнкүреше, аңы, донъяға ҡарашы лексикографик планда тасуирлана.

«Башҡорт фольклоры концептосфераһы» һүҙлегенә 168 концепт инде. Лингвокультурология үҙәгендә тел менән мәҙәниәтте бәйләп өйрәнеүсе кеше тора, шунлыҡтан башҡорт халыҡ ижады өлгөләренең нигеҙен «кеше» концепты тәшкил итә. Башҡалары был

концептты тулыландырып, бер бөтөн булып ойоша. Һөҙөмтәлә башҡорт фольклоры концептосфераһы түбәндәге төркөмдәргә бүленде:

1. Кеше (шәхси сифаттары һәм эске донъяһы, мөнәсәбәттәр, социаль функция, туғанлыҡ бәйләнештәре).

2. Йәмғиәт (йәшәйеш, йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр).

3. Тәбиғәт (ер һәм күк есемдәре, хайуандар донъяһы, үҫемлектәр донъяһы).

4. Мифологик образдар.

Концепттарҙың теоретик нигеҙен фәнни хеҙмәттәр, һүҙлектәр тәшкил итһә, уларҙы һайлап алыу сығанағы булып халыҡ ижады өлгөләре торҙо [Сәмситова, 2013, 492].

«Башҡорт тел картинаһында мәҙәниәт концепттары» (Өфө: БДПУ, 2014; Өфө: Ғилем, 2015), «Башҡорт теленең эквивалентһыҙ лексикаһы» (Өфө: Ғилем, 2019) монографияларында һүҙ лингвокультурологияның төп төшөнсәләре – тел, мәҙәниәт, тел картинаһы, тел шәхесе, концепт, мәҙәниәт концепттары, милли-мәҙәни аспекттағы лексика һ.б. тураһында бара.

Мәктәптә үткәрелгән башҡорт теле дәрестәрендә туған телдең лексик, фонетик, морфологик, синтаксик нормалар системаһын өйрәнеүҙе уларҙың телмәр төҙөүҙәге роле менән бәйләп алып барыуҙың әһәмиәте ифрат ҙур икәнлеген иҫтә тотоп, уҡыу предметы булған "Башҡорт теле" ярҙамында туған телде фән булараҡ өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уятырға кәрәк, ғөмүмән, телде өйрәнгәндә уҡыусылар уның лексик, фонетик, орфографик һәм пунктуацион системаһын ғына түгел, ә башҡортса телмәрҙең төҙөлөү үҙенсәлектәрен дә өйрәнеп, уның быуаттар төпкөлөнән килгән төҙөк система булыуын да аңларға, туған телебеҙҙең дөйөм кешелек барлыҡҡа килтергән фәнни, мәҙәни фекерҙе бирә алыу һәләтенә эйә булған тел икәнлеген, шағир һүҙҙәре менән әйткәндә, "уның бер телдән дә кәм түгеллеген" тойорға тейештәр.

Башҡорт теле башҡорт мәктәптәрендә уҡытыу теле булараҡ дөйөм лингвокультурологик аспектта ҡаралырға тейеш, сөнки ул гуманитар белем биреүҙең иң мөһим һәм айырылғыһыҙ өлөшө, уҡытыуҙы гуманлаштырыуҙың иң юғары сағылышы булып иҫәпләнә, йәғни тел айырым кешенең һәм тотош йәмғиәттең йәшәүенең һәмэшмәкәрлегенең төп шарты булып тора. Башҡорт теле курсының йөкмәткеһе тел төшөнсәһенең дөйөм мәғәнәһенә нигеҙләнә, һәм ул лингвистика фәненең һуңғы ҡаҙаныштарына ярашлы төҙөлә.

Шулай итеп, башҡорт теле дәрестәрен лингвокультурологик планда өйрәнеү – бөгөнгө көн талабы. Күп милләтле регионда күп телле һәм толерантлы шәхес тәрбиәләү – тел уҡытыусыһының бурысы. Башҡорт теле дәрестәрен лингвокультурологик аспектта ойоштороу – үҙенең үткәнен, тарихын, телен, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен, халыҡ ижадын, психологияһын, ғөрөф-ғәҙәттәрен белгән, заман менән бергә атлаған, ҙур маҡсаттар ҡуйған тел шәхесе тәрбиәләү ул!

**Әҙәбиәт**


Воробьев В. В. Лингвокультурология (теория и методы). – М.: Изд-во РУДН, 1997. 331 с.

Воробьев В. В., Саяхова Л. Г. Русский язык в диалоге культур: Элективный курс для 10, 11 классов школ гуманитарного профиля. М.: Ладомир, 2006. 286 с.

Зайнуллин М. В. Общие проблемы лингвокультурологии. Уфа: РИЦ БашГУ, 2008. 206 с.

Самситова Л. Х. Лингвокультурологическая концепция обучения башкирскому и родным языкам в образовательных учреждениях Республики Башкортостан. Уфа: Китап, 2010. 24 с.

Самситова Л. Х. Культурные концепты в башкирской языковой картине мира: Монография / Научн. ред. проф. М. В. Зайнуллин. Уфа: Гилем, 2015. 360 с.

Саяхова Л. Г. Лингвокультурологическая концепция обучения русскому языку и учебники нового поколения: Методическое руководство для учителей русского языка (5 – 11 классы). Уфа: Китап, 2006. 224 с.

Степанов Ю. С. Константы. Словарь русской культуры. Опыт исследования. -2-е изд. М.: Языки русской культуры, 2004. 991 с.

Сәмситова Л. Х. Башҡорт тел картинаһында мәҙәниәт концепттары. Лингвокультурологик һүҙлек / Ғилми мөх. проф. М.В. Зәйнуллин. Өфө: Китап, 2010. 164 б.

Сәмситова Л. Х., Әхмәтшина Г. С., Ижбаева Г. Р., Байназарова Г. М., Килмәкова Ә. Н., Ташбулатова Р. М. Башҡорт фольклоры концептосфераһы. Лингвокультурологик һүҙлек. Өфө: Китап, 2013. 492 б.

**L. H. Samsitova**

*Bashkir State Pedagogical University named after M. Akmulla*
*st. October Revolution, 3-a, Ufa, 450008, Russia*
*E-mail: luiza_sam@mail.ru*

## LINGUO-CULTURAL ASPECTS OF THE STUDY OF THE BASHKIR LANGUAGE

The article contains the substantiation of theoretical and practical significance of linguocultur al approach in teaching the Bashkir language. It is observed that the realization of linguocultural approach in educating is one of the effective facilities of involving the student into the national culture through studying the native language, and also in developing conscientious attitude and interest in language and forming of linguocultural competense. The idea is substantiated that the linguocultural aspect in language teaching contributes to the development of students' intellectual and creative abilities, broadens their horizons, enriches their vocabulary, etc.

*Keywords***:** linguoculturology, language, culture, the Bashkir language, linguistic personality.

### References

Vorobiev V.V. Linguoculturology (theory and methods). Moscow: Publishing House of RUDN, 1997. 331 p.

Vorobev V.V., Sayakhova L.G. The Russian language in the dialogue of cultures: Elective course for 10, 11 forms of humanitarian schools. Moscow: Ladomir. 2006. 286 p.

Zaynullin M.V. General problems of linguoculturology. Ufa: BashSU, 2008. 206 p.

Samsitova L.Kh. Linguoculturological concept of teaching Bashkir and native languages in educational institutions of the Republic of Bashkortostan. Ufa: Kitap, 2010. 24 p.

Samsitova L.Kh. Cultural concepts in Bashkir linguistic picture of the world. Ufa: Gilem, 2015. 360 p.

Sayakhova L.G. Linguoculturological concept of teaching the Russian language and textbooks of the new generation: A methodological guide for teachers of the Russian language (grades 5-11). Ufa: Kitap, 2006. 224 p.

Stepanov Yu.S. The Constants Dictionary of Russian culture. Research experience. 2nd ed. Moscow: Languages of Russian culture, 2004. 991 p.

Samsitova L.Kh. Cultural concepts in Bashkir linguistic picture of the world. A Linguocultural dictionary. Ufa: Kitap, 2010. 164 p.

Samsitova L.Kh., Akhmetshina G.S., Izhbaeva G.R., Baynazarova G.M., Kilmakova A.N., Tashbulatova R.M. The conceptosphere of Bashkir folklore. A Linguocultural dictionary. Ufa: Kitap, 2013. 492 p.